*Резида FАРИПОВА,*
*уҡытыусы*

# Йөрәгеңдә халкың булһын

Екатеринбург ҡалаһында 1984 йылдан бирле йәшәйем. Математика уҡытыусыһы булһам да биш йыл башҡорт теленә өйрәтеү курстарын алып барҙым. Шиғыр бәйгеләре үткәрҙек, әҫәрҙәрҙән өҙөктәр ятланыҡ, йырҙар өйрәндек... Халыҡ алдында сығыштар ҙа яһаныҡ.

Был курстарҙы алып барыу өсөн ата-әсәләрҙе ныҡ өгөтләргә тура килде. Уларҙың фекеренсә: «Былай ҙа күп уҡырға кәрәк, өҫтәүенә башҡорт теле менән баштарын ҡатырыу нимәгә кәрәк...» Рус ерлегендә аҙнаға бер-ике тапҡыр ғына алып барған был курстарҙан ғына башҡорт телен өйрәнеп булмай. Етмәһә, өйҙә башҡортса һөйләшмәйҙәр. Бында йәшәгән балалар өсөн башҡорт теле сит тел һымаҡ һанала. Ә сит тел өйрәнеү өсөн даими дәрестәр һәм һәр саҡ шул телдә һөйләшеү кәрәк.

Мин үҙем I Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы делегаты, Свердловск өлкәһендә үткәрелгән ике ҡоролтайҙа ла ҡатнаштым. Милли үҙенсәлектәрҙе һаҡларға, телемде юғалтмаҫҡа тырышам. Ике балам да башҡортса белә, ғаиләлә ике телдә лә һөйләшәбеҙ. Башҡорт йыҙарын, моңдарын тыңлайбыҙ, өйрәнәбеҙ, йырлайбыҙ.

Ауылға ҡаланан өләсәй-олатайҙарына ейән-ейәнсәрҙәре ҡайтһа, аңлаша алмай ыҙалана. Ҡыҙғаныс та, аяныс та! Бер-береһенә ғәзиз кешеләр сит ил кешеләре һымаҡтар. Әсә телен белмәйҙәр.

Туған телде ата-әсә өйрәтмәһә, кем өйрәтергә тейеш һуң? Күптәр балалары үҫеп етеп, тел белмәгәс ғәйепте ситтән эҙләй. Үҙегеҙ ғәйепле түгелме һуң!? Ҡалаларҙа йәшәүсе йәш ата-әсәләр, был хатаны ҡабатламағыҙ, балаларығыҙҙы бәләкәйҙән үҙ телегеҙгә өйрәтегеҙ! Бына шунда ғына туған телебеҙ юғалмаҫ.

Минең яратҡан шағирым Рәми Fарипов яҙғанса:

Әсәм теле миңә — сәсән теле, —
Унан башҡа минең халҡым юҡ,
Йөрәгендә халҡы булмағандың
Кеше булырға ла хаҡы юҡ!



09-2001.p65 35 28.08.01, 10:51
Black